UCHBASH.COM

2/2023

# Башҡортостан УҠЫТЫУСЫҺЫ

## УЧИТЕЛЬ БАШКОРТОСТАНА

podpiska.pochta.ru

***Рафис Минегалиевич***
***ЗИЯЗЕТДИНОВ,***

*доктор исторических наук, профессор,*
*заслуженный работник народного образования РБ,*
*почетный работник общего образования РФ,*
*почетный работник высшего образования РФ*



*Издается с февраля 1920 года*

# Расширенное заседание коллегии Агенства по печати и СМИ РБ

9 февраля 2023 года, г. Уфа















uchbash.com

# БАШҠОРТОСТАН УҠЫТЫУСЫҺЫ

## Учитель Башкортостана

№2 (1044) 2023

Ижтимағи-педагогик
һәм фәнни-методик айлыҡ журнал

Общественно-педагогический
и научно-методический ежемесячный журнал

Баш мөхәррир һәм
мөхәрририәт рәйесе
**С.Ғ. КӘРИМОВ**

Баш мөхәррир урынбаҫары
**Ә.Ф. Сәғитова**

Яуаплы секретарь
**Т.З. Рәхмәтуллин**
(т. 292-77-63)

Бүлек мөхәррирҙәре
(т. 292-77-63)
**Г.Ф. Шаһиева**
**Э.Р. Сәғиҙуллина**
nach.shkola68@mail.ru
**Т.Ф. Миңлеәхмәтова**
**Г.Ә. Ҡусҡарбаева**
**И.С. Ғүмәров**
**Г.М. Байназарова**

Компьютерҙа йыйыусы
**З.Н. Рамаҙанова**

Компьютерҙа нәшергә
әҙерләүсе һәм биҙәүсе
**И.Т. Ҡолбахтин**

**Общий тираж – 8112**
(7796 – печатный,
316 – электронный)

Электрон адрес:
**uch.bash@mail.ru**
(т/факс: 292-77-63)
**http://www.uchbash.com**

ЙӨКМӘТКЕҺЕ СОДЕРЖАНИЕ

## БАШҠОРТ ТЕЛЕ ҺӘМ ӘҘӘБИӘТЕ

**Ғәлиев А.З.** Беҙ тыныслыҡ яҡлы! .................................. 3
**Юлмөхәмәтов М.Б., Кәримов С.Ғ.** Танылған уҡытыусы, арҙаҡлы остаз ................................................................ 6
**Санъяров Ф.** Тик Салауат менән мин Рухлы башҡорт булам... ............................ 11
**Назарова Г.Ә.** Әҙәби телгә һут биреүсе сығанаҡ ........... 12
**Хисмәтуллина Г.Ғ.** Бөйөклөктөң ябайлыҡта икәнлеген Үҙ-үҙенә бик һирәктәр асҡан... ....... 16

## БАШЛАНҒЫС МӘКТӘП
## НАЧАЛЬНАЯ ШКОЛА

**Яхина Л.И.** Методы и приемы обучения башкирскому языку в школах с русским языком обучения ....................... 19
**Лукманова А.Ф.** Невидимые нити, объединяющие нас .......................................................................... 23
**Ташбулатова Ш.Х.** Деление двузначного числа на двузначное ............................................................. 25
**Уельданова Н.М.** Финансовая грамотность с героями сказок ............................................................................ 28
**Бажанова О.А.** Инклюзивное образование во внеклассной работе ........................................................................... 32

## МӘКТӘПКӘСӘ ТӘРБИӘ
## ДОШКОЛЬНОЕ ВОСПИТАНИЕ

**Кинцель В.Н.** Организация взаимодействия родителей с ДОО по развитию SOFT SKILLS навыков в условиях центра игровой поддержки ............................................... 34

## РУССКИЙ ЯЗЫК И ЛИТЕРАТУРА

**Тазиева Э.Г.** Роль литературы в формировании у детей толерантного отношения к людям с ограниченными возможностями ............................................................. 38
**Нухова К.Т.** Дробные числительные ............................... 43

**Ойоштороусылары:**
Башҡортостан Республикаһының Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы;
Башҡортостан Республикаһының «Башҡортостан Республикаһы» Нәшриәт йорто дәүләт унитар предприятиеһы

**Учредители:**
Агентство по печати и средствам массовой информации Республики Башкортостан;
Государственное унитарное предприятие Республики Башкортостан Издательский дом «Республика Башкортостан»

16+

podpiska.pochta.ru

**Редколлегия:**
Р.А. Абуталипова, Т.Г. Амангильдин, И.И. Валеев, З.М. Габитова, В.Н. Гуров, С.Ф. Максютова, Ф.Б. Саньяров, А.Н. Усевич, М.Б. Юлмухаметов, А.В. Янгиров, В.Г. Яфаева

Теркәү тураһындағы ПИ ФС 77-70646-сы таныҡлыҡ 2017 йылдың 15 авгусында Элемтә, информацион технологиялар һәм киң мәғлүмәт сараларын күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт идаралығы тарафынан бирелде.

**Редакцияның һәм нәшер итеүсенең адресы:** 450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13.

**Адрес редакции и издателя:** 450079, Республика Башкортостан, г. Уфа, ул. 50-летия Октября, 13.

**Банкта беҙҙең реквизиттар**:
ИНН 0278066967
КПП 027843012
Р/счет40602810200000000009
К/счет 30101810600000000770
БИК 048073770 Филиал ПАО «БАНК УРАЛСИБ» в г. Уфа

Ҡульяҙмалар рецензияланмай һәм кире ҡайтарылмай. Материалдарҙы «Башҡортостан уҡытыусыһы»нан күсереп баҫҡанда журналға һылтанма яһау мотлаҡ. Редакция фекере авторҙар фекере менән тап килмәҫкә лә мөмкин. Баҫылған материалдарҙағы мәғлүмәттәрҙең дөрөҫлөгө өсөн авторҙар яуаплы.

© «Башҡортостан уҡытыусыһы», 2 (1044), 2023.

Отпечатано в Республиканском издательстве «Башкортостан» – филиале ГУП РБ Издательский дом «Республика Башкортостан» (450079, Республика Башкортостан, г. Уфа, ул. 50-летия Октября, 13. Тел./факс: 8 (347) 226-99-52).

Баҫырға ҡул ҡуйылды: 17.02.2023 й.
Баҫылып сыҡты: 28.02.2023 й.

Офсет ҡағыҙы.
Ҡағыҙ форматы 70х100 1/16.
Офсет ысулы менән баҫылды.
Шартлы баҫма табаҡ 7,8.
Иҫәп-нәшер табаҡ 12,8.
Тиражы 7796 дана.
Заказ №2.0020.23.
Хаҡы ирекле.

## МИЛЛИ ТЕЛДӘР ҺӘМ ӘҘӘБИӘТТӘР
## НАЦИОНАЛЬНЫЕ ЯЗЫКИ И ЛИТЕРАТУРЫ

**Фәррәхова З.Х.** Якташыбыз Ә. Баяновның «Сәяхәтнамә» әсәрен өйрәнү ........ 47
**Трофимова М.М.** Чăваш литературин классикĕ К.В. Иванов çуралнă кунне халалласа ирттернĕ «Акатуй» ача-пăча фольклор уявĕ ........ 49
**Байдимирова Н.Д.** Безличный глагол ........ 53

## ИНОСТРАННЫЙ ЯЗЫК В ШКОЛЕ

**Галикеева Г.Г.** Defender of the Fatherland Day ........ 55

## ТЫУҒАН ЯҠТЫ ӨЙРӘНЕҮ
## КРАЕВЕДЕНИЕ

**Хәбибуллина И.Р.** Беҙ, беҙ, беҙ инек... ........ 57
**Фәррәхова Ә.М.** 144-се бейеклек ........ 60

## ТӘБИҒИ ҺӘМ ТЕҮӘЛ ФӘНДӘР
## ЕСТЕСТВЕННЫЕ И ТОЧНЫЕ НАУКИ

**Гайнуллина Р.Х., Гафарова Г.М.** Реализация межпредметных связей математики и физики ........ 64
**Рамазанова Г.М.** Выделение проблемы и выведение темы при создании школьных химических проектов ........ 68

## ҺӨНӘРИ БЕЛЕМ БИРЕҮ
## ПРОФЕССИОНАЛЬНОЕ ОБРАЗОВАНИЕ

**Мөхәмәтов Ғ.В.** «Ҡоростоң да ул иң ҡатыһы...» ........ 72

## ТӘРБИӘ ҺӘМ ӨҪТӘЛМӘ БЕЛЕМ БИРЕҮ
## ВОСПИТАНИЕ И ДОПОЛНИТЕЛЬНОЕ ОБРАЗОВАНИЕ

**Михеев А.В.** Модель работы с одаренными детьми ........ 76
**Мусина Р.** Һәр төрлө тыйыу баланың ижадын сикләй ........ 80
**Галлямов З.Р.** Проблема идентичности башкирской культуры в условиях глобализации ........ 82

## МӘҒАРИФҠА ИДАРА ИТЕҮ
## УПРАВЛЕНИЕ ОБРАЗОВАНИЕМ

**Кутуева З.А.** Потомки педагогической династии Муратовых ........ 85
**Мәксүтова Ф.Ғ.** Йәшәү – һынау күпере ........ 89
**Хисамитдинова Г.Т.** Боевой путь шаймуратовца ........ 92
**Даутов М.** Сила предков ........ 93
**Валеев И.И.** Слово о педагоге и ученом ........ 94

*«Башҡортостан уҡытыусыһы» журналын ҡайҙа, күпме алдыралар?* ........ 95

Беҙҙең календарь ........ 96

podpiska.pochta.ru

# Башҡорт теле һәм әҙәбиәте

*23 февраль – Ватанды һаҡлаусылар көнө*

## Беҙ тыныслыҡ яҡлы!

(Дәрестән тыш уҡыу. XI класс)

**А.З. ҒӘЛИЕВ,**
**Көйөргәҙе районының Яҡшымбәт мәктәбе уҡытыусыһы**

**Маҡсат:** М. Кәримдең "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ", "Беҙҙең өйҙөң йәме" повестарына, шиғырҙарына таянып, һуғыштың кешелек донъяһын юҡҡа сығарыусы аяуһыҙ хәл икәнлеген иҫбатлау; уҡыусыларҙың фекерләү ҡеүәһен үҫтереү; улар күңелендә илһөйәрлек тойғолары тәрбиәләү.

**Йыһазландырыу:** М. Кәримдең портреты, китаптары, альбомдары ҡуйылған күргәҙмә, компьютер, проектор, экран, ҡағыҙҙан эшләнгән ҡоштар, уныш экраны.

**Дәрес барышы**

**I. Ойоштороу.**

– Хәйерле көн, хөрмәтле уҡыусылар һәм уҡытыусылар! Дәресебеҙҙең эпиграфы менән танышайыҡ. *(Экранда М. Кәримдең "Рус ҡыҙы" шиғырынан өҙөк күрһәтелә. Уҡытыусы тасуири уҡый.)*

*Төтөн йотоп, асыу утын йотоп,*
*Батып тиргә, тояҡ саңына,*
*Күбекләнгән атта беҙ үтәбеҙ*
*Байып барған ҡояш яғына.*
*Танк йәнсеп үткән өй янында*
*Төтәй һуңғы ҡаҙыҡ – бағана,*
*Шул бушлыҡта яңғыҙ тора ине*
*Йөҙөн хәсрәт баҫҡан бер ҡыҙ бала.*

– Эпиграфтан сығып, маҡсаттарҙы билдәләйек. Дәрестә нимәләр тураһында һөйләшербеҙ һәм үҙебеҙгә ниндәй маҡсаттар ҡуйырбыҙ? *(М. Кәрим ижады тураһында һөйләшеп, һуғыштың ҙур афәт икәнлеген билдәләрбеҙ һәм һығымталар эшләрбеҙ.)*

**II. Төп өлөш.**

– Иғтибарығыҙҙы экранға йүнәлтегеҙ, уҡыусылар. *("Һеңлекәш" кинофильмынан телеграмма килгән өҙөк ҡарала.)*

– Был кинофильм ниндәй әҫәргә таянып төшөрөлгән, өҙөктә төп иғтибарҙы нимә йәлеп итә? *(Яуаптар. Слайдта телеграмма күрһәтелә.)*

– Тағы ла экранға күҙ һалығыҙ. *(Слайдта ҡара ҡағыҙ – похоронка.)*

– Ул нимә тип атала? Телеграмма һәм ҡара ҡағыҙ араһында ниндәй бәйләнеш һәм айырма күрергә мөмкин? *(Телеграмма ул кешенең тере икәнлеген күрһәтһә, похоронка, киреһенсә, кеше ғүмеренең өҙөлөүен белдерә. М. Кәримдең "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" повесындағы "Ҡалды ғәзиз башым йәш көйгә" бүлегендә авторҙың үлеме тураһында ғаиләһенә хәбәр килеүе һәм шуға бәйле ваҡиғалар һүрәтләнә.)*

– Был тетрәткес хәбәрҙе Мостай Кәримдең тормош иптәше Рауза ханым һәм ғаилә ағзалары нисек ҡаршы ала? *(Рауза таш кеүек ҡата. Уны ике кеше етәкләп өйҙәренә алып ҡайталар һәм сисендереп һан-*



podpiska.pochta.ru

*дыҡ өҫтөнә ултырталар. Кесе инәйе: “Бала минең күкрәгемдә йәшәй. Уның урыны һыуынмаған әле, тимәк, уны ҡәбер алмаған. Сабыр бул, ҡыҙым”, – ти. Атаһы: “Аҡрынлап быға күнегергә тура килер”, – ти. Һәм улар кискә тиклем тиерлек өндәшмәйенсә ултыралар. Һуңынан асыҡлана: ул похоронка күрше ауылдағы еҙнәһе тураһында була.)*

– Эйе, ҡәһәрле һуғыш күпме балаларҙы етем итә, аслыҡтан һәм башҡа сәбәптәрҙән ғүмерҙәре өҙөлгәндәр бихисап. Һуғыш афәттәре әҙиптең тағы ла ниндәй әҫәрҙәрендә сағыла? *(М. Кәрим һуғыш тураһында “Беҙҙең өйҙөң йәме”, “Ярлыҡау” повестарын, драмалар, “Ҡара һыуҙар” поэмаһын һ.б. күп әҫәрҙәрен яҙа.)*

– “Беҙҙең өйҙөң йәме” повесында автор ниндәй проблемалар күтәрә? *(Һуғыш, кеше яҙмыштарының буталыуы, милләттәр дуҫлығы проблемаларын күтәрә.)*

– Ә Оксананың ярым етем ҡалыуы тураһында һеҙ нимәләр беләһегеҙ? *(Йәмилдең атаһы, Украина ауылын фашистарҙан азат иткән ваҡытта, бер өйҙә әсәһенең үле кәүҙәһе эргәһендә илап ултырған бәләкәс ҡыҙҙы күреп, уны шинеленә төрөп, үҙе менән алып китә һәм балалар йортона тапшыра. Өй мейесенә күмер менән адресын яҙып ҡалдыра. Ҡатынына “Оксананы килеп ал”, – тип хат яҙа. Бер нисә айҙан һуң Фәһимә апай Оксананы алып ҡайта.)*

– Эйе, шулай итеп украин ҡыҙы Оксана башҡорт ғаиләһенә килеп эләгә. Башҡорт малайы Йәмил уны үҙ һеңлеһе итеп, ә Оксана Йәмилдең әсәһен һәм атаһын үҙенеке итеп ҡабул итә. Ике ғаилә яҡындан дуҫлаша. *(Слайдта “Һеңлекәш” кинофильмынан Йәмил һәм Оксана күрһәтелә.)*

– Повеста автор һуғышты нисек тасуирлай? Табып, уҡып ишеттерегеҙ. *(“Беҙҙең өйҙөң йәме”, 73 – 74-се биттәр.)*

– Был әҫәрҙә күтәрелгән проблемалар бөгөн дә актуалме? *(Эйе, әле Украинала ҡан ҡойош бара. Ҡалалар емерелә, балалар етем ҡала, уларҙы беҙҙең илебеҙҙең төрлө өлкәләренә алып ҡайталар. Көйөргәҙе районының Маяҡ ҡасабаһындағы балалар йортонда ун бала тәрбиәләнә. Махсус операция тамамланғас, бәлки, уларҙы ла туғандары эҙләп, килеп алып китерҙәр.)*

*(Слайдта һалдаттарҙы һуңғы юлға оҙатыу, балаларҙы ҡаршы алыу күренештәре күрһәтелә.)*

– Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында беҙҙең яугирҙар илебеҙҙе генә түгел, Европа илдәрен дә (Польша, Чехословакия, Югославия, Венгрия, Болгария һ.б.) немец оккупанттарынан азат иттеләр. Беҙҙең һалдаттар ул илдәрҙе үҙҙәренең тыуған иле кеүек күреп, шунда ғәзиз ғүмерҙәрен бирҙеләр. М. Кәрим Бөйөк Ватан һуғышы осоронда хәҙерге Украина ерҙәрен фашистарҙан ҡотҡарыуҙа ҡатнашҡан һәм Украинаға бағышлап бик күп шиғырҙар яҙған. Уның ниндәй шиғырҙарын беләһегеҙ? *(“Украина”, “Украина өсөн”, “Киев”, “Днестрҙа май” һ.б. шиғырҙар.)*

– Әйҙәгеҙ, “Украина” шиғырын тыңлап үтәйек. *(Алдан ятлаған уҡыусы һөйләп ишеттерә.)*

*Украина. Ағастарың һығып,*
*Алма бешкән ҡояш нурында.*
*Украина! Окоп ҡаҙыным мин*
*Гөл-сәсәгең үҫер урында.*
*Тыныс түгел Украина төнө –*
*Төн, ҡалтырап, ергә һыйына.*
*Ҡыҙҙар ҡулы өҙөр был алмалар*
*Туптар шартлағанда ҡойола...*
*Украина! Һине ҡотҡарырға*
*Мин тупрағын үптем Уралдың.*
*Иламасы һылыу. Яҙҙар килер.*
*Һуғыш һүнер, ҡояш һүрелмәҫ,*
*Алма бешер, ләкин ул алмаға*
*Һинән башҡа ҡулдар үрелмәҫ.*

– Ул осорҙа һалдаттарыбыҙ Украина өсөн ҡан ҡойған, ә хәҙер фашизм режи-



podpiska.pochta.ru

мын яҡлаған украиндар Рәсәйҙе “баҫып алыусылар” тип ғәйепләй. Ә үҙҙәре ҡан менән яҙылған тарихты юҡҡа сығарырға теләй.

– 1941 йылда Мостай Кәрим, “Мин фронтҡа китәм, иптәштәр!” тигән шиғри антын биреп, һуғышҡа юлланғайны. Беҙ был шиғырҙың бөгөн яңынан ҡабатланыуына шаһит булдыҡ. *(Уҡыусы “Мин фронтҡа китәм, иптәштәр!” шиғырын яттан һөйләй.)*

– Донбасс халҡын был режимдан азат итеү өсөн һәм илебеҙҙең именлеген, халҡыбыҙҙың хәүефһеҙлеген һаҡлау өсөн Рәсәй иле Махсус хәрби операция һәм өлөшләтә мобилизация үткәрҙе. Төрлө ҡалаларҙан, районларҙан бик күп ир-егеттәребеҙ тағы алыҫ көнбайышҡа юлланды. *(Слайдта – егеттәрҙе оҙатыу күренештәре.)*

– Дәүләтебеҙ, халҡыбыҙ һалдаттарға нисек ярҙам итә? *(Ҡала, райондарҙа, ауылдарҙа ирекмәндәр, халыҡ һалдаттар өсөн кәрәк-яраҡ әйберҙәр йыйып, посылкалар алып бара. Беҙҙең ауылыбыҙҙа ла был эш ойошторолдо. Ауылыбыҙ имам-хатибы Фәрхәд хәҙрәт менән уҡытыусыбыҙ Азат абый Пенза ҡалаһына барып, яҡташтарҙың хәлдәрен белеп, посылкаларҙы тапшырып ҡайттылар. Шулай уҡ һалдат ғаиләләренә төрлө ярҙам күрһәтәләр. Тик барыбыҙҙың да күңелендә хәүефле уйҙар, донъяла тыныслыҡ булмауы бик борсолдора.)*

*(Пензала һалдаттар менән осрашыу күренештәре күрһәтелә.)*

– Украиналағы хәлдәр, тыуған илебеҙҙең киләсәге һәм буласаҡ һалдаттарыбыҙҙың яҙмышы өсөн һәр кем борсола, хафалана. Бөгөн һәр кешенең телендә “Тыныслыҡ” тигән һүҙ доға менән бергә яңғырай.

**III. Йомғаҡлау.**

– Беҙ тыныслыҡ яҡлы! Дәресебеҙ аҙағында бөйөк шағирыбыҙҙың “Ҡоштар осорам” шиғырын тыңлап үтәйек. *(Уҡыусы яттан һөйләй.)*

– Күкрәктәребеҙҙән тик изге теләкле ҡоштар ғына осорайыҡ! Мин һеҙгә тыныслыҡ символы булған аҡ күгәрсендәр бүләк итәм. *(Уҡыусыларға һәм ҡунаҡтарға аҡ күгәрсендәр таратыла.)*

**IV. Баһалау.**

– Үҙегеҙҙең бөгөнгө эштәрегеҙҙе уңыш экранында баһалағыҙ, уҡыусылар. *(Балалар баһа ҡуйып, уҡытыусыға тапшыралар.)*

| Нимә белә инем? | Ниндәй яңылыҡтар белдем? | Үҙемде нисәгә баһаланым? |
|---|---|---|

**V. Өйгә эш**: 1. М. Кәримгә хат яҙырға. 2. Әҙиптең тормошо һәм ижады тураһында презентация һәм кроссворд эшләргә. 3. “Беҙ тыныслыҡ яҡлы!» тигән тема буйынса инша-фекерләү яҙырға.

– Уҡыусылар, дәресебеҙҙе бөйөк шағирыбыҙҙың “Ҡара һыуҙар” поэмаһынан өҙөк менән тамамлағым килә.

*... И һайрай, һайрай һандуғас*
*Ярһыған,*
*И һайрай, бөтмәҫ шатлығы*
*Бар һымаҡ.*
*И һайрай, гүйә, донъяла*
*Туй ине.*
*Әйтә кеүек: “Булдыра алһаң,*
*Тый мине.*
*Ҡөҙрәтең юҡ. Тырышма ла,*
*Исмаһам.*
*Туптар тынып, мин тынмамын*
*Һис ҡасан!”*
*И һайрай, һайрай, күпме наҙ*
*Телендә!*
*Һайрай үс итеп һуғышҡа,*
*Үлемгә...*

– Тыныслыҡҡа дан йырлаған һандуғас кеүек, беҙ ҙә тик тыныс тормошто данлайыҡ һәм шуға ынтылайыҡ!

Дәресебеҙ өсөн рәхмәт!



podpiska.pochta.ru

***Филология фәндәре кандидаты Ф.Б. Санъяровҡа – 70 йәш***

# Танылған уҡытыусы, арҙаҡлы остаз

**М.Б. ЮЛМӨХӘМӘТОВ,**
**Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәғариф хеҙмәткәре, педагогия фәндәре кандидаты, доцент, дәүләт хеҙмәте ветераны;**
**С.Ғ. КӘРИМОВ,**
**“Башҡортостан уҡытыусыһы” журналының баш мөхәррире, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре, Рәсәй Федерацияһының почетлы мәғариф хеҙмәткәре**

Башҡортостан Республикаһы һәм Рәсәйҙең мәғариф системаһында, айырыуса, милли белем биреү һәм тәрбиә өлкәһендә замандашыбыҙ Фәнзил Бүләк улы Санъяровтың исеме бик күптәргә таныш. Журналыбыҙҙың быйылғы тәүге һандарының береһен танылған педагог һәм арҙаҡлы остаз, бер үк ваҡытта журналист, әҙип, талымһыҙ йәмәғәт эшмәкәре Ф.Б. Санъяровтың педагогик һәм фәнни хеҙмәттәре хаҡында һөйләү менән башлап ебәреү 2023 йылдың Рәсәйҙә, Президент В.В. Путиндың Указына ярашлы “Педагог һәм остаз” йылы тип иғлан ителеү менән тап килеүе үҙе бер символик күренеш, тип һанайбыҙ. Эйе, үҙенең 50 йылға яҡын педагогик эшмәкәрлеген билдәләүсе Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, РСФСР-ҙың һәм Башҡортостан Республикаһының мәғариф алдынғыһы, филология фәндәре кандидаты, Башҡортостан Хөкүмәтенең Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премияһы, Ҡырмыҫҡалы районының М. Өмөтбаев, Күгәрсен районының Ш. Хоҙайбирҙин премиялары лауреаты, “Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы – 1993” республика конкурсы еңеүсеһе, “Рәсәйҙең йыл уҡытыусыһы” билдәһе, “Рәсәйҙең хеҙмәт даны” алтын миҙалы менән бүләкләнеүсе, Рәсәй Федерацияһы йәмәғәт наградалары комитетының “Михайло Ломоносов” ордены кавалеры, Ҡырмыҫҡалы районының маҡтаулы гражданины, мәғариф ветераны Ф.Б. Санъяров, ысын мәғәнәһендә, уҡытыусы һәм остаз исеменә һәр йәһәттән лайыҡ.

Ул 1953 йылдың 17 февралендә Ҡырмыҫҡалы районының иң боронғо тарихи ауылы Бишауыл-Уңғарҙа донъяға килә. Бала сағы кескәй балаларҙы янғындан ҡотҡарыу, ауыр хәлдә ҡалғандарға ярҙамға ынтылып тороу кеүек бик күп мажаралы ваҡиғаларға бай. Һәр ваҡыт үҙенән кесе балалар менән уйнай, уларҙы һаҡлап, ҡурсалап йөрөтә, һуғыштан һуңғы ауыр йылдар булһа ла, үҙ ризығы менән бүлешергә әҙер тора ул. Күп ваҡыт шуның өсөн өйҙәгеләрҙән әрләнеп тә бөтә. Бишауыл-Уңғар һигеҙ йыллыҡ мәктәбенең VI – VII кластарында уҡығанда өлкәндәр кеүек галстук тағып йөрөй. Бар хыялы – уҡытыусы булыу. Быға этәргесе лә юҡ түгел. Райондың Үтәгән һигеҙ йыллыҡ мәктәбендә әсәһенең ҡустыһы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, алыштырғыһыҙ мәктәп директоры булып эшләй. Филология фәндәре кандидаты, уҡыу ҡулланмалары авторы, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, СССР, РСФСР-ҙың мәғариф



podpiska.pochta.ru

алдынғыһы Рим Сәйетбаттал улы Искәндәров (1931 – 2010) беҙҙең геройыбыҙға һәр йәһәттән өлгө булып тора.

“Класс етәксем Миңлебай Вәлиевты ныҡ яраттыҡ, – тип һөйләй бөгөн мәғариф ветераны Ф.Б. Санъяров. – Дәрестән һуң да өйҙәренә барып, ярҙамлашып йөрөнөк, улдары менән урамында уйнар инек”. Күршеһендә йәшәгән туған тел уҡытыусыһы, мәктәп директоры Мәүлетбикә Вәлиева хаҡында ла йылы тойғолар һаҡлай күңелендә. Ә Һәүәләй урта мәктәбендә уҡығанда К.Ш. Хәмзина, Р.М. Рамазанова, Р.Я. Рамазанов, мәктәп директоры Р.И. Халиҡовтар яҡын кәңәшсе лә, остаз да була уға. Немец теле уҡытыусыһы Клара Хәмзина, һиңә туған тел һәм әҙәбиәт йә тарих уҡытыусыһы булырға кәрәк, тип йыш ҡабатлай сығарылыш уҡыусыһына.



*Һүрәттә: Рәсәй Федерацияһының һәм Башҡортостан Республикаһының элекке мәғариф һәм фән министрҙары В.М. Филиппов һәм Ғ.М. Мөхәмәтйәнова менән. 2002 йыл*

Совет Армияһында хеҙмәт итеп ҡайтҡан егет бер йыл Стәрлетамаҡ синтетик каучук заводында аппаратсы булып эшләп ала. Шул ваҡытта рабфакта рус теленән әҙерлек үтә, ә тарих буйынса белеме һынатырлыҡ түгел, йыл буйына авиация полкының киске партия мәктәбендә КПСС тарихын өйрәнә, хатта кесе офицерҙар мәктәбенә, һуңынан хәрби училищеға димләйҙәр үҙен. Әҙерлеге бушҡа китмәй: БДУ-ла конкурс һынауҙарын тик “5” билдәһенә тапшыра. Әммә ғаилә хәле арҡаһында уҡыуын ситтән тороп уҡыу бүлегендә дауам итергә мәжбүр була. 1974 – 1983 йылдарҙа Ф.Б. Санъяров Ҡырмыҫҡалы районының Алайғыр һигеҙ йыллыҡ мәктәбендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы, дүрт йыл мәктәп директоры булып эшләп ала. 1980 йылда “Социалистик ярыш еңеүсеһе” билдәһе менән бүләкләнә. Инде бер аҙ тәжрибә туплаған йәш етәксене 1983 йылда Башҡортостан халыҡ мәғарифы министрлығына инспектор итеп саҡыралар.

“Министр Сабир Шәйәхмәт улы минең менән сәғәттән ашыу аралашып ултырҙы, эштең мөһимлеге тураһында һөйләне. Аҙаҡ та унның менән оҙаҡ йылдар йылы мөнәсәбәттә булдыҡ. С.Ш. Йыһаншин минең аңымда әле лә олпат ветеран, кешелекле һәм кеселекле шәхес, остаз булып йәшәй”, – тип хәтергә ала Ф.Б. Санъяров.

Кеше яҙмышы ҡатмарлы булған һайын йөкмәткелерәк, байыраҡ була бара.



podpiska.pochta.ru

Ф.Б. Санъяров Төмән өлкәһенең Слободчиков ярҙамсы интернат-мәктәбенә директор итеп эшкә саҡырыла. 1983 – 1988 йылдарҙа ошо ифрат ауыр йөктө тарта ул: айырым уҡытыу алымдары, сабырлыҡ, психологик һиҙемләү талап иткән уҡыу йортон етәкләй. Ошо йылдарҙа Свердловск дәүләт педагогия институтының дефектология факультетын тик яҡшы билдәләргә тамамлай, Ханты-Мансийск ҡалаһындағы шундай уҡ мәктәп-интернатҡа директор вазифаһына тәҡдим ала.

“Ике юғары белем менән мин нишләп, үҙ халҡыма хеҙмәт итмәй, сит яҡтарҙа солтан булып йөрөйөм әле?”, – тигән ҡарарға килә әҙерлекле белгес. Ниәт иткән – моратына еткән. Үҙ теләге менән Күмертау (хәҙерге Көйөргәҙе) районының Ермолаево ярҙамсы интернат-мәктәбендә директорҙың тәрбиә эштәре буйынса урынбаҫары, директоры булып эшләп ала. Күпмелер ваҡыттан һуң уны КПСС-тың Күмертау райкомына идеология буйынса бүлек мөдире итеп раҫлайҙар. 1991 – 1994 йылдарҙа район мәғариф бүлегендә методист, методика кабинеты мөдире вазифаларын башҡара, абруй ҡаҙана. Ул 1992 – 1993 йылдарҙа уҡытыусыларҙың республика конкурсында ҡатнашырға ҡарар итә. Тәүге йылда РСФСР-ҙың мәғариф алдынғыһы билдәһе менән бүләкләнә, ә алдағы йылда ул – “Башҡортостандың йыл уҡытыусыһы” дәрәжәһенә эйә була. Шул уҡ йылда Мәскәүҙә Рәсәй кимәлендә сығыш яһап, юғары исемде йәнә раҫлай.

“Конкурстарҙа ҡатнашыу педагогтарға бик кәрәкле һәм мөһим һынау, башҡаларҙы күрәһең, үҙеңдең оҫталығың менән уртаҡлашаһың. Мин бер ваҡытта ла тартынып торманым. 1994 йылдың июнендә Мәғариф министрлығы республика гимназия-интернаттары директорҙарына конкурс уҙғарҙы. “Башҡортостан” гәзитендә иғланды күреп ҡалыу менән ғаризамды тапшырҙым, етди һынауҙар үттем һәм Республика музыкаль тәрбиә биреү гимназия-интернатына директор итеп тәғәйенләндем. Әле лә конкурстарҙан туҡтағаным юҡ. 2022 йылда Мәскәүҙә Халыҡ-ара мәғарифты үҫтереү академияһы һәм Эшҡыуарҙар ассоциацияһы “Иң яҡшы педагог” I регион-ара конкурсын уҙғарҙы. Ошо абруйлы конкурстың дипломанты булыу бәхете тейҙе һәм “Рәсәйҙең хеҙмәт даны” алтын миҙалына лайыҡ булдым. Йәш педагог һәм директорҙарға кәңәшем шул: үҙегеҙгә бикләнеп ятмағыҙ, төрлө кимәлдәге һынауҙарҙа әүҙем ҡатнашығыҙ!” – ти юбиляр.

Ф.Б. Санъяровты Республика музыкаль тәрбиә биреү гимназия-интернатына директор итеп һайлап яңылышмайҙар етәкселәр. Тиҙ арала ул уҡыу йортонда заманса мөхит тыуҙыра, гимназия статусын аныҡ эштәр менән раҫлай. Өфө сәнғәт академияһы менән килешеү төҙөлә, сығарылыш уҡыусылары шунда артабан оҫталығын күтәрә, БДПУ менән дә ошондай эштәр алып барыла. Гимназияның абруйы күтәрелә, матди базаһы нығына. Беренсе халыҡ артисыбыҙ Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемен мәңгеләштереү республика хөкүмәте тарафынан юғары баһалана. Ошондай эштәр һөҙөмтәһендә 2000 йылдың мартында Ф.Б. Санъяровты Р. Ғарипов исемендәге 1-се башҡорт республика гимназия-интернатына директор итеп күсерәләр. Республикабыҙҙың йөҙөк ҡашы булған уҡыу йортон-

podpiska.pochta.ru



Һүрәттә: Рәсәй Федерацияһының “Йыл уҡытыусыһы” конкурсының XXV йыллығын билдәләү сараларында Башҡортостан вәкилдәре. Мәскәү, Кремль, 2018 йыл

да ла яҡты эҙ ҡалдырҙы ул. 2002 йылда бында Бөтә Рәсәй лицей, гимназия-интернаттары директорҙары семинары уҙҙы, сара Рәсәй фән һәм мәғариф министрлығы тарафынан юғары баһа алды. БР Президенты ҡарамағындағы дәүләт хеҙмәте һәм идара итеү академияһын ҡыҙыл дипломға тамамлаған Ф.Б. Санъяров танылған гимназия-интернатҡа өр-яңы һулыш өрҙө, тип әйтһәк, хата булмаç. Уҡыу йортонда демократик етәкселек принциптары ҡулланылды, педагогтар ижади хеҙмәт өлгөһө күрһәтте, күптәре конкурстарҙа әүҙем ҡатнашты, юғары исемдәргә лайыҡ булды. Бөгөн гимназия-интернат замандса өр-яңы бинала эшләй икән, унда Ф.Б. Санъяровтың да үҙ өлөшө бар. Был турала Башҡортостан Республикаһының мәғариф министры Ғ.М. Мөхәмәтйәнова үҙенең бер нисә монографияһында яҙып сыҡты.

Филология фәндәре кандидаты Ф.Б. Санъяров 2004 йылда БДУ-ның башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетына эшкә саҡырыла. Ғилми етәксеһе, академик М.В. Зәйнуллиндың, ректор М.Х. Харрасовтың тәҡдимен ул күктән төшкән бәхет тип ҡабул итә. 2004 – 2014 йылдарҙа факультетта доцент, декандың фәнни, ә һуңғараҡ уҡытыу эштәре буйынса урынбаçары вазифаһын ҙур яуаплылыҡ менән башҡара. Факультеттың университет кимәлендә йыл һайын фән, тәрбиә, уҡытыу буйынса I – III урындар яулап тороуында унын да өлөшө бар. Күп һанлы маҡтау ҡағыҙҙары тап шул хаҡта һөйләй. Артабан Ф.Б. Санъяров Башҡортостан Республикаһының Мәғарифты үçтереү институтында туған телдәр һәм әҙәбиәттәр кафедраһында доцент булып эшләй. Бөгөн арҙаҡлы уҡытыусы һәм остаз хеҙмәтен Өфө күп профилле һөнәри колледжында башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы булып дауам итә. Колледж директоры, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәғариф хеҙмәткәре С.Б. Баязитов былай тип һөйләй: “Фәнзил Бүләк улы йәштәргә биргеһеҙ дәрт менән эшләй, башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытыуҙы юғары кимәлгә күтәреүҙә ал-ял белмәй хеҙмәт итә, үҙе лә, студенттары ла ҙур уңыштарға ирешә. Бөгөн ул колледжда ысын мәғәнәһендә абруйлы уҡытыусы һәм остаз”.

Ф.Б. Санъяров ғилми эш менән дә әүҙем шөғөлләнә. Ул – ике йөҙҙән ашыу фәнни, публицистик һәм әҙәби тәнҡит мәҡәләләре авторы. “Урал батыр: лингвистик тикшеренеү тәжрибәһе”, “Халыҡ яҙыусыһы Ғайса Хөсәйенов концептосфераһы”, “Ғайса Хөсәйенов парсалары-

podpiska.pochta.ru

ның поэтикаһы” монографиялары, “Телем – иманым” публицистик мәҡәләләр йыйынтығы донъя күрҙе. “Халыҡ яҙыусыһы Ғайса Хөсәйенов концептосфераһы” монографияһы Рәсәй электрон китапханаһы исемлегенә индерелгән. Атап үтелгән хеҙмәттәр студенттар һәм ғалимдар араһында әүҙем ҡулланыла. Бөгөн уҡытыусы-ғалим лингвокультурология, лингвостилистика һәм әҙәби тәнҡит өлкәһендә уңышлы эшләй. Ул халыҡ шағирҙары Мостай Кәрим, Назар Нәжми, Рауил Бикбаев, Ҡәҙим Аралбай, Фаҡиһа Туғыҙбаева, Гөлфиә Юнысова, Тамара Ғәниевалар, халыҡ яҙыусылары Ғайса Хөсәйенов, Суфиян Поварисовтар ижадына арналған әҙәби тәнҡит мәҡәләләре яҙҙы. Ирек Кинйәбулатов, Мөхәмәт Закиров, Салауат Әбүзәр, Йомабикә Ильясова, Закир Әҡбәров, Барый Ноғомановтар ижадын яңы ҡараштар нигеҙендә киң ҡатлам уҡыусыларға еткерҙе. Очерк оҫтаһы булараҡ та ижады ыңғай баһаланды. Юбиляр үҙе лә әҙәби ижад менән шөғөлләнә. Уның лирик шиғырҙары әленән-әле ваҡытлы матбуғатта баҫылып тора. Ғалим, әҙип һәм журналист, РФ һәм БР Журналистар, Яҙыусылар союздары ағзаһы Ф.Б. Санъяров – “Башҡортостан”, “Кызыл таң” гәзиттәренең, “Ватандаш”, “Ағиҙел”, “Башҡортостан уҡытыусыһы” (2012, 2022) журналдарының йыл лауреаты.

Ф.Б. Санъяров – журналыбыҙҙың иң әүҙем авторҙарының береһе, йыл һайын журнал биттәрендә уның 5 – 6 мәҡәләһе донъя күрә. Редколлегия ағзаһы булараҡ, ул ултырыштарҙа әүҙем ҡатнаша, баҫмабыҙҙы пропагандалауға тос өлөш индерә, республика мәктәптәрендә һәм колледждарында сығыш яһай.

Республикабыҙ халҡы уны әүҙем йәмәғәтсе тип тә белә. Ф.Б. Санъяров I – V Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайҙары делегаты итеп һайланды, оҙаҡ йылдар башҡарма комитет ағзаһы, мәғариф, фән һәм башҡорт телен һаҡлау, үҫтереү комиссияһы рәйесе вазифаһын атҡарҙы. Ҡоролтайҙың “Ал да нур сәс халҡыңа!” миҙалы менән бүләкләнде. Ул – республикабыҙҙың Туған телдәр уҡытыусылары ассоциацияһының тәүге рәйесе. Бөгөн БР Мәғариф министрлығының ветерандар советы президиумы ағзаһы булып тора. “Ярты быуатлыҡ педагогик хеҙмәтем менән ҡәнәғәтмен. Минең бихисап студенттарым, уҡыусыларым бар, уларҙың рәхмәт һүҙҙәрен йыш ишетәм. Атап әйткәндә, 22 уҡыусым юрист һөнәрен һайланы, улар юриспруденцияға намыҫ менән хеҙмәт итә. Бик күптәре БР Хөкүмәтендә юғары вазифалар биләй. Яҙыусылар, журналистар, музыканттар араһында ла кисәге уҡыусыларым, гимназистарым күп, уларҙың хеҙмәтенә, тормоштарына һоҡланып йәшәйем. Был бит оло бәхет!”, – тип ихлас күңелдән шатлығы менән уртаҡлаша Фәнзил Бүләк улы.

Педагог һәм остаз Ф.Б. Санъяров – өлгөлө ғаилә башлығы ла. Улдары һәм килендәре барыһы ла юғары педагогик белемле. Бөгөн улар дәүләт хеҙмәтендә эшләй. Ейәнсәре Йәсминә, ейәндәре Таһир, Азамат һәм Мораттың матур булып үҫеп килеүҙәренә ҡыуана юбиляр. Уларҙың, беҙ ҙә уҡытыусы булабыҙ, тиеүҙәренә шатланып ҡуя. Кем белә, бик ихтимал. Киләсәгебеҙ быуындар бәйләнешенә ҡайтып ҡала бит. Дуҫыбыҙҙы, коллегабыҙҙы 70 йәш тулыу менән ихлас ҡотлайбыҙ! Артабан да уңыштар, ҡоростай сәләмәтлек теләйбеҙ!

podpiska.pochta.ru

**Фәнзил САНЪЯРОВ**

# Тик Салауат менән мин Рухлы башҡорт булам...

* * *

*Биш йөҙ йыллыҡ имән ҡаршыһында*
*Уйҙарымдан торам уйылып.*
*Йәшәйҙер ул ғәзиз тупрағымдан*
*Алған һутлы дымға туйынып.*
*Ҡартлас ҡая тора алдарымда –*
*Миллион йылдар уның ғүмере.*
*Юрауҙарым ошо ҡаяларға*
*Тағы шунса йәшәү күререн!*
*Иңдәремә кинәт ҡолар төҫлө*
*Баш осомда торған тулған ай.*
*Ошо мәлдә күңел күҙем асыла,*
*Бар йыһандың серен тойғандай.*
*Алдарымда ғорур һынлы ҡурай*
*Бер һыҙҙырыр мәлен көтә бит.*
*Ҡурайыма йәндәр өрөр өсөн,*
*Ғаләмдәрҙә Ваҡыт үтә бит!*

## Салауат

*Кем һуң мин Салауатһыҙ?!*
*Мин – бер кем дә түгел:*
*Донъялар тар, рухым һыныҡ,*
*Бушлыҡ тулы күңел.*
*Кем һуң мин Салауатһыҙ?!*
*Мин – бер кем дә түгел:*
*Етемһерәп, сараһыҙҙан,*
*Торған йәшен түгеп...*
*Кем һуң мин Салауатһыҙ?!*
*Мин – бер кем дә түгел:*
*Йөрәгемдә тик ул барҙа,*
*Хисле минең күңел.*
*Тик Салауат менән мин*
*Рухлы башҡорт булам.*
*Үҫһен, тиһәң, Башҡортостан –*
*Шуны уйла, улан!*

## Атайсал

*Ҡырмыҫҡалым йәнә халыҡ йыйҙы,*
*Бар тарафтан кеше ағылды.*
*Һөйләшергә, күҙгә күҙҙәр төбәп,*
*Яңы фекер, яйы табылды.*

*«Атайсал» бит – быуын бәйләнеше,*
*Кесе Ватаныңа тоғролоҡ.*
*Бөгөн халҡым бергә тупланыуы*
*Әллә ниҙәренә торорлоҡ!*

*Табындарҙы күрәм «Атайсал»да, –*
*Ғәзиз төбәгендә ҡунаҡтар.*
*Алыҫ араларҙы яҡынайтҡан,*
*Улар йәшәмәгән юҡ яҡтар.*

*Меңдәр менән тулған*
*Ҡырмыҫҡалым, –*
*Ут күршеһе бит Табындың.*
*Рухи берҙәмлектәр бәйләгәнгә,*
*Бигерәк күркәм йәме табындың!*

*Танып буйы башҡорттары бында,*
*Танып алып, алам ҡосаҡҡа.*
*Дуҫ-туғандың ихлас осрашыуы –*
*Утын ташлау тере усаҡҡа.*

*Йыландарҙы йыйған тыуған яғым,*
*Тормағандар йыраҡ юл, тиеп.*
*Яңы байрам йыйған берҙәмлектән*
*Әйтеп тора – бер ни юҡ, тиеп.*

*Әй «Атайсал»!*
*Илдә яңы фекер –*
*Халыҡ дуҫлығының билгеһе!*
*Бынан ары ла һин милләт тупла,*
*Килеп торһон барының килгеһе!*

podpiska.pochta.ru

*21 февраль – Халыҡ-ара туған тел көнө*

# Әҙәби телгә һут биреүсе сығанаҡ

**Г.Ә. НАЗАРОВА,**
**Хәйбулла районының Татыр-Үҙәк мәктәбе уҡытыусыһы**

Туған телебеҙ – ата-бабалар тарафынан ҡурсаланып, быуындан-быуынға күсә килгән рухи хазина. Уның һәр һүҙенә ҡарата иғтибарлы булыу, сафлығын һаҡлау, үҙен яҡлау – һәммәбеҙҙең изге бурысы. Шуға ла һәр быуын, оло бурысты аңлап, телебеҙҙең киләсәге хаҡында хәстәрлек күрергә тейеш.

Әлеге ваҡытта беҙҙең районда бөтәһе 3908 башҡорт балаһы уҡый. Шуларҙың 1020-һе башҡорт мәктәптәрендә туған телендә белем алһа, 1373 бала үҙ телен өйрәнә. Беҙҙең Татыр-Үҙәк ауылы мәктәбендәге 184 уҡыусының 94-е башҡорт милләтенән. Рус мөхитендә йәшәгән уҡыусыларҙа үҙ теленә, мәҙәниәтенә ҡыҙыҡһыныу уятыуҙа, әлбиттә, туған тел уҡытыусыһының хеҙмәте баһалап бөткөһөҙ. Ошо маҡсатта мин дәрестәремдә халыҡтың йәнле һөйләү теленә иғтибарҙы нығыраҡ йүнәлтәм. Ысынлап та, диалекттар һәм уларға ҡараған һөйләштәр – әҙәби телгә һут биреп, уны тулыландырып тороусы тамырҙар ул.

Халыҡтың йәнле телмәре менән аралашмаған әҙәби тел үҙенең эстетик үҫеш һәләтлеген юғалта.

Башҡорт әҙәби теле дөйөм халыҡ телен барлыҡҡа килтергән өс ҙур диалектҡа нигеҙләнеп формалашҡан: көнсығыш, көньяҡ һәм көнбайыш диалект. Көньяҡ диалектҡа Эйек-Һаҡмар һөйләше (Ейәнсура, Мәләүез, Баймаҡ районының көньяғы, Күгәрсен, Хәйбулла, Көйөргәҙе райондарында йәшәгән үҫәргән, ҡыпсаҡ, тамъян, түңгәүер ырыуы башҡорттары), бөрйән һөйләше, дим һөйләше инә.

Көньяҡ диалекттың төп билдәһе күплек һәм яһаусы ялғауҙарҙың, һүҙҙең ниндәй өнгә бөтөүенә ҡарап, нигеҙҙә, ике төрлө килеүендә. Шулай ҙа күп осраҡта – "л" һаҡлана. Мәҫәлән: маллар – әҙәби телдә малдар, атлар – аттар, ҡаҙлар – ҡаҙҙар, урманныҡ – урманлыҡ, иңне – иңле һ.б. Көньяҡ диалект үҙенең өндәре, грамматик үҙенсәлектәре, һүҙлек составы яғынан хәҙерге башҡорт әҙәби теленә бик яҡын тора.

Телмәрҙең һөйләү формаһы көндәлек аралашыуҙа йыш ҡулланыла. Һөйләү һәм яҙыу формалары бер төрлө түгел, тәүгеһендә телдең орфоэпик, лексик, фонетик, грамматик нормалары билдәле дәрәжәлә ирекле файҙаланыла.

Үҙебеҙҙең төбәктә генә ҡулланылған ҡайһы бер һүҙҙәрҙе йыйыуға, өйрәнеүгә ҡыҙыҡһындырыу маҡсатында, атай-әсәйҙәрҙән, ҡартатай-өләсәйҙәрҙән ишетелгән йәки улар ҡулланған көндәлек һүҙҙәр йыйылмаһын туплайбыҙ. Материалдарҙы фәнни яҡтан тикшереп, һүҙҙәрҙең мәғәнә биҙәген асыҡлап, туған телдең бөтмәҫ-төкәнмәҫ байлығын уҡыусыларға күрһәтеүҙе иң төп бурыстарҙың береһе итеп ҡуям. Шуға ла уҡыусыларҙың яҙма эштәрендә, һөйләү телмәрендә күп ҡулланылған диалект һүҙҙәргә ҙур иғтибар бүләм. Мәҫәлән: кәнишнә, йаҡ, у (ул), бутый, "ниәкәй әйттем әле". Ҡайһы саҡта, халыҡтың йәнле һөйләү теленә ҡағылышлы ҡыҙыҡлы осраҡтар ҙа булғылай: бер уҡыусы тексты йөкмәткеһен һөйләгән ваҡытта "уның әсәһе йөнясҡы (ойоҡбаш) бирҙе", тип һөйләп китте. Ә беҙҙең яҡта ойоҡбашты күпселек осраҡта йөннаскый тип йөрөтәләр. Телмәрҙә йыш осраған



podpiska.pochta.ru

“иçерек”, “килә ята”, (ә бына Учалы яҡтарында “ҡайҙа китеп утыраhың?”, тиҙәр), “нимәшәп ятаhың?” тигән һүҙҙәрҙең ҡулланылышы беҙҙең яҡҡа ғына хас. “Иçерек” һүҙе “алйот” (глупый) тигәнде аңлата.

Уҡыусылар яҙма эштәрендә бер үк мәғәнәле һүҙҙәрҙе төрлө варианттарҙа ҡуллана: “мал сығарҙыҡ кәртә аçтына”, “малды сығарҙыҡ әүеçлек аçтына”, “мал сығарҙыҡ ялан кәртәгә, лапаç аçтына”. Әсәй-өләсәйҙәре ярҙам итhә, яҙмаларҙа күп кенә диалект һүҙҙәрен осратырға мөмкин: “өйләре бәләкәс буғас, улар өсмөйөш һуғырға йыйындылар”, “самауырҙы сығарҙыҡ усаҡ (ишек алдындағы мейес) алдына”, “самауыр ҡайнағас, өләсәй түвәсәйен әпкилергә ҡушты”, “кискеhен ишектең келәhен элергә онотканбыҙ”, “атайым өй тирәhен hайғау менән кәртәләне”, “торомбашты болғағыс м(е)ән тартып, йәмкә м(е)ән ҡыçып, hоçҡоға hалдым”, “беҙ атайым менән Һаҡмарҙа мурҙа ҡорҙоҡ”, “өләс балаçты ике яҡтан буй hәм арҡыры юрған менән түшәргә ҡушты, ә өçтөнә ҡорама юрған hалды”, “сәйгүндең йүшкенен таҙаларға уаҡыт”, “мунсаның тығынын тыҡ”, “мунсаның этмәhен яп”, “hырыған салвар кейеп сыҡты”.

Бер-беребеҙҙән артыҡ алыç йәшәмәhәк тә, hәр районда бер үк hүҙ төрлөсә ҡулланыла: сүмес — ижау, бата — никах, өрә — бутҡа, әрпеш — hәпрә, мөгәрәк — баҙ, алҡа — hырға, миндек — япраҡ, кәпәс — бүрек, яçтыҡ — мендәр, туçтаҡ — сеүәтә, таваҡ; күнәк — биҙрә, бүкән — ултырғыс, усаҡлыҡ — утяҡҡыс, уттыҡ, аласыҡ; кәртә — hарай, мал өйө, ҡора; тупhа — туффа, туфалта, тупфа; сәйнүк — баҡырса, сәйгүн; суйын — сүген, ширлек — эскәмйә. Икенсе бер ауылға, районға барhаҡ, яңы урында мотлаҡ ниндәй ҙә булhа берәй үҙенсәлекле hүҙ йәки hүҙҙең формаhын (ялғауын) осратабыҙ.

Шулай итеп, әҙәби тел нормалары шул телдә hөйләшкән халыҡ өсөн бер төрлө булhа ла, йәнле hөйләү теле, урынына ҡарап, төрлөсә яңғырай. Уҡыусымдың иншаhынан бер миçал килтерәм.

— Минең өләс, Учалыға ҡунаҡҡа барғанда бик уңайhыҙ хәлгә тарыным, тип hөйләй. Уның килеү хөрмәтенә ҙурлап, ҡунаҡ йыйғандар. Өләс апhынының киленен маҡтап, йылы hүҙ әйтергә уйлаған: “Эй, аллам, ҡалай киленегеҙ әрhеҙ, осоп-ҡунып тора!” — тигән, был килендең эшлекле, етеҙ булыуына ишара яhап. Ә учалылар телhеҙ ҡалған, бер-берећенә ҡарашҡандар ҙа өндәшмәгәндәр. Һуңынан ғына апhыны өләскә:

— Ни өсөн беҙҙең киленде әрhеҙ тип әйттең? — тигән.

— Әрhеҙ булғас, әйтәм инде: өйөң ялтырап тора, өçтәлең тулы hый, ҡунаҡтарыңды аяҡ-өçтө тороп hыйлай киленең, бер ултырмай йүгереп йөрөй. Әрhеҙ тимәй, нимә тип әйтәйем hуң? Эшлекле инде, эшлекле, — тип яуаплаған өләс.

Апhыны шунан hуң ғына көлөп ебәргән hәм өләскә *“әрhеҙ”* hүҙенең Учалы яҡтарында ниндәй мәғәнәлә ҡулланылғанын аңлатып биргән. Унда был hүҙ йүнhеҙ, әрпеш, иренә тоғро булмаған ҡатынға ҡарата әйтелә икән. Өләс ошондай уңайhыҙ хәлгә ҡалыуын аптырап hөйләне, — тип яҙа уҡыусы.

Өләсәй, әсәйҙәр менән үткәрелгән кластан тыш сараларҙа, әңгәмә ваҡытында ерле hөйләштең hүҙ байлығының сикhеҙ икәнлегенә инанаhың: “йәш ҡыҙҙар сәстәренә үрмес үргәнләр ине”, “ҡыҙҙар гөлфөй кейеп килгәннәр икән”, “бәкес, талғыр йыйып ашай торғайныҡ”, “әсәйем жекитын кейеп ҡунаҡҡа китте”, “самауыр торваhын алып, самауырҙы баç”, “мунсағың килешеп тора үҙеңә”. Беҙҙең халыҡ



podpiska.pochta.ru

янбаштан тубыҡҡа тиклем ерҙе бурвай тип йөрөтә, мәҫәлән, “минең бурвайыма һыуыҡ тейгән”, “ботоңа йоҡа ойоҡ кейгәнһең, бурвайыңа һыуыҡ тигеҙәһең бит”, тип әрләй торған ине өләсәйҙәр. Шулай уҡ беҙҙә Бүребай тигән ауыл да бар, халыҡ был ауылды ла Бурвай тип йөрөтә.

Диалектизмдарҙың таралышы ғәжәп үҙенсәлекле. Ҡайһы бер һүҙҙәр тотош бер диалектҡа йәки уға ҡараған күпселек һөйләштәргә таралған булһа, икенселәре айырым бер һөйләштә, уның бер өлөшөндә, бәләкәй генә төбәктә, хатта бер нисә ауылда ғына осрарға мөмкин. Кешеләрҙең хис-тойғоно, аптырауҙы белдергән ыстаыста, ата-а-аҡ (Татыр-Үҙәк ауылы), про йәки проҡ (Әбүбәкир), мо йәки ме (Байғусҡар), баһ (Йәнтеш) тигән ымлыҡтарҙы ҡулланыуҙары беҙҙең яҡтың ерле һөйләшен тағы ла ҡыҙыҡлы, үҙенсәлекле итә.

Дөрөҫ уҡырға һәм яҙырға өйрәтеү, ижад итеү һәләтен үҫтереү менән бер рәттән, телдең мөғжизәүи мөмкинлектәрен файҙаланыу, уның матурлығын, үҙенсәлектәрен күрһәтеү ҙә тел дәрестәренең мөһим бурысы булып ҡала. Халыҡ телендә көндәлек ҡулланылышта иң йыш яңғыраған туғанлыҡ быуыны буйынса бүленеш терминдарының төрлөлөгө уҡыусыларҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра, мәҫәлән: ҡәрсәй – атайҙың әсәһе, өләс – әсәйҙең әсәһе; ҡарттай, ҡартатай – атайҙың атаһы; ҡарындаш – бер туған һеңле, апһын – килендәш, абзый – ағай, балдыҙ – еҙнәгә ҡарата ҡатындың һеңлеләре, ҡәйнеш – еңгәгә ҡарата ирҙең ҡустылары, олатай – ата-әсәйҙән өлкән ир, инәй – ата-әсәйҙән өлкән ҡатын кеше, еңгәй – ағайҙың ҡатыны, бикәс – еңгә өсөн ирҙең кесе һеңлеләре, һылыуым – һеңлем.

Тормошта һүҙҙәрҙең мәғәнә биҙәгенә ҙур баҫым яһала. Мәҫәлән, беҙҙең һөйләштә *әсәм* һүҙе киң ҡулланылыш тапҡан. Беҙҙә әҙәби телдәге *әсәй* һүҙенә хатта үгәй әсәй мәғәнәһе лә бирелә: “Өфөлә уҡыған апайымдың *әсәй* тип өндәшеүенә әсәм, үпкәләп: “Миңә, әсәм, тип өндәш, әсәй тип әйтмә, мин бит һиңә үгәй әсәй түгел, тип аңлатты”, – тип яҙған үҙ иншаһында бер уҡыусым. “Беҙ ҡәртәсәйҙе дәзәй, ҡарттайҙы дадай тип әйтәбеҙ. Ҡайҙан килеп сыҡҡанын белмәйем. Мин иң өлкәне, минән һуң тыуған ейәнсәрҙәре бөтәһе лә шулай тей, хатта дәзәй менән дадайҙың балалары, бөтә яҡын туғандары хәҙер уларға шулай өндәшә”, – тигән ҡыҙыҡлы инша юлдарын уҡырға була.

Халыҡ телен өйрәнгәндә яҡташ яҙыусыларыбыҙҙың ижадына ла мөрәжәғәт итәбеҙ. Әҫәрҙең йөкмәткеһе менән танышҡандан һуң, үҙебеҙҙең ерлеккә хас халыҡтың йәнле һөйләү телмәренән аңлатмалы һүҙлектәр төҙөү, шул һүҙҙәр менән һөйләмдәр уйлап яҙыу һ.б. эштәр эшләнелә.

1. “Берәренә бармаҡ менән генә сирткән булһағыҙ ҙа, аяу булмаясаҡ, көллөгөҙҙөң дә (бөтәгеҙҙең дә) башы бына мин баҫып торған ошо ерҙә ҡырҡыласаҡ.”

2.“Уның бер ҡасан да былдай бөжләү (ҡурҡыу) ялмауында ҡалғаны булманы.”

3. “Мәҙәгән (арыған) аяҡты яҙыр кәрәк бит.”

4.“Сура батыр шунда ғына биленең ауыртҡан ерен һыпырҙы, илбаҡтарына (яҡташтарына) табан йылғыр кейектәй боролоп баҫты.” (Ф. Аҡбулатова, “Яҙылып бөтмәгән китап” (романдан өҙөк), “Ағиҙел” журналы. №2, 2010 й.)

**Һүҙлек эше.** Ғажиз – аптырау, ғәжәпкә ҡалыу; тәтүс – матур, ҡужа – хужа булыу, бер талай – бер килке, ләпелдәү – һөйләү.

**Бирелгән һүҙҙәр менән һөйләмдәр төҙөү.**

Көтмәгәндә килеп ингән ят кешене күргәс, ғажиз булдым.



podpiska.pochta.ru

Ҡалай күлдәгең тәтүс!

Ҡужа булып киткәс, эре сирттерә инде!

Ул һөйләгәнде бер талай аңлай алмай торҙоҡ.

Күп ләпелдәгән кешене яратмайым.

Уҡыусыларҙа йәнле һөйләү телмәренә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уятыу маҡсатынан беҙ үҙ районыбыҙҙың һөйләше буйынса һүҙлек төҙөүҙе дауам итәбеҙ. Ундағы ҡайһы бер һүҙҙәргә туҡталып үтәм.

Атраҡ – уҫал, әсе телле ҡатын (Әбеш ауылы).

Батҡыс – баҫҡыс.

Бәкес, әппәкес – йәшел татлы һуған.

Бишмәт – безрукавка.

Бүкән – ултырғыс.

Бурман – ситәндән үреп эшләнгән оҙон арбаға ултыртыу өсөн ҡулайлама.

Бутый – бурки.

Бушлат – өлкәндәрҙең ҡышҡы кейеме.

Ғәләмәт – бик күп.

Гөлфөй – гольфи.

Гүкә – ҡеүәтләү һүҙе (Мәҫәлән, һуғым ваҡытында “Эшегеҙ уң булһын” тигән мәғәнәлә әйтелә.)

Әргендек – насар, эләгеп-йығылып барған кеше (хилый).

Әүәле – борон, элек.

Жекит – флюштан тегелгән күлдәк.

Йаҡ – юҡ.

Йәмкә – күмер өсөн ҡыҫҡыс.

Ҡабартма – әсе йәки сөсө ҡамырҙан майҙа бешерелгән икмәк.

Келә – элгес.

Кәрнәңкә – эсәк лайлаһы.

Кәртә – һарай, мал өйө.

Ҡомған – ҡул йыуыу өсөн, тәһәрәт алыу өсөн сәйнүк.

Ҡорама юрған – сепрәктән һуғылған балаҫ.

Күмәс – булочка.

Күнәк – биҙрә.

Кәнишнә – конечно.

Лапаҫ – әүәҫлек, ялан кәртә, уның тирәһендә өҫтө генә ябылған урын.

Май икмәк – табикмәк, ҡабартма.

Мунсаҡ – мәрйен (бусы).

Мурҙа – талдан үрелгән, балыҡ тотоу өсөн ҡоролма.

Һайғау – ҡырҡылған нәҙек уҫаҡ ағасы.

Һитатай – ҡыйшаңлаған, осоҡ кеше.

Һыйыр ятағы – ҡырҙа һыйыр торған урын.

Һырыған ыштан – һырма салбар

Олағыу – ситтә, билдәһеҙ яҡта йөрөп килеү, күпмелер ваҡытҡа юҡ булыу.

Риҙуан – оҙон арба.

Сәкүшкә – арбаның тәгәрмәсе ысҡынып төшмәһен өсөн ағас йәки тимер ҡулайлама.

Селек һепертке – веник из акации.

Сәрмә – киленден ҡәйнәһенә биргән иң ҙур бүләге, килен һандығының төбөнә һалғандар.

Сираҡ – аяҡ (Ғәлиәхмәт, Әбеш яҡтарында).

Сөсө икмәк – күмәс.

Суйын – сүген, суйындан (чугун) эшләнгән һауыт.

Сүмес – ижау (ковш).

Сүрәкәй икмәк – әсе ҡамырҙан ваҡлап бешерелгән икмәк.

Табикмәк – пресные булочки.

Таҡа-тоҡа – етер-етмәҫ.

Талғыр – әсе һуған.

Тәртишкә – тәртешкә (кочерга).

Торламай – оҙаҡ булмай, төрлө ерҙә әҙ-мәҙ булыу.

Түвәсәй – самауыр түбәсәйе (заглушка).

Түвәтәй – мосолмандарҙың баш кейеме.

Туҡра – туҡта.

Тупыс – бармаҡһыҙ йәки ҡул суғы булмаған ҡул.

Турпыша – сепрәктән һуғылған балаҫ.

podpiska.pochta.ru

Турта – һурпа, май өҫтөнә сыҡҡан күбек.

Үрмес – таҫма (бантик).

Шыйғалаҡ – етеҙ, сит эш менән булышыу, кәрәкмәгән эш эшләп ташлау.

Эшкинмәгән – бушаҡ кеше.

Ошондай эш халҡыбыҙҙың йәнле һөйләү телмәренең һүҙ байлығын тағы ла сағыуыраҡ күрһәтә.

Халыҡтың йәнле телмәре милли әҙәби телгә лә йоғонто яһай. Ул дөйөм халыҡ һөйләү теленең әҙәби телгә яҡынайып үҫеүенә килтерә. Әммә улар, бер-береһенә ни дәрәжәлә йоғонто яһаһалар ҙа, ҡушылып китә алмайҙар, сөнки айырым бер кешенең үҙенсәлекле һөйләүе әҙәби тел нормаларынан һәр саҡ айырылып тора.

Шулай уҡ диалектизмдар менән самалап эш итеү кәрәк, сөнки ерле һөйләш һүҙҙәре үтә артыҡ ҡулланылһа, аҙ ғына кешегә аңлайышлы һүҙҙәр әҙәби телде сүпләй башлай. Дәрестәремдә алда әйтелгән ошо юлдарға ла баҫым яһайым.

Ниндәй генә етди тикшеренеүҙәр алып барылмаһын, күп һанлы һәм күп төрлө һүҙлектәр төҙөлмәһен, халыҡ теле һәр ваҡыт сағыштырмаса аҙ өйрәнелгән өлкә булып ҡала килә. Йәнле һөйләү телен өйрәнеү, ерле материалдар менән танышыу уҡыусыларҙа үҙ телебеҙгә ҡарата ҡыҙыҡһыныу уята, ижади эшләргә өйрәтә.

# Бөйөклөктөң ябайлыкта икәнлеген Үҙ-үҙенә бик һирәктәр асҡан...

**Г.Ғ. ХИСМӘТУЛЛИНА,**
**Ишембай ҡалаһы махсус уҡытыу-тәрбиә һәм һөнәри белем биреү училищеһы уҡытыусыһы, ӨФТУ аспиранты**

Фирҙәүес Бәширова 1945 йылдың 14 октябрендә Ишембай районының Смаҡай ауылында тыуған. Ошо ауылдың һауаһын еҫкәп, тәүге аҙымдарын яһаған. Үҙенән ике-өс тапҡыр бейегерәк булып шапырынып үҫкән кесерткән сатыры араһынан тыҡрыҡ буйлап төшөп, Аҡбуҙат ярына ятып, шишмә һыуҙары эскән, уның йырын, тыуған еренең моңон күңеленә һеңдергән. “Һыу буйында һаҡсылай теҙелеп үҫкән бәүелсәк талдар һәм шунда оялаған ҡарғалар шауы... Мөңгөр-мөңгөр һөйләшкән һәлмәк хәрәкәтле ҡарттар...Үткән һайын арҡамдан тупылдатып яратыусы асыҡ йөҙлө апайҙар, еңгәләр, инәйҙәр – оноторлоҡмо ни?! – ти шағирә. – Ер йөҙөндәге ҡәҙерле сәңгелдәк-төйәгем һалған йәшәү ойотҡоһо ғәжәп көскә эйә булып сыҡты: үҙемдең тәрән тарихлы башҡорт халҡының ҡыҙы икәнлегемде йәшермәнем, ҡайҙа ғына йәшәһәм дә, хатта сит илдәрҙә йөрөгәндә лә ҡолағымда башҡорт теленең аһәңле ауаздары тирбәлде, тирбәләсәк.”

Иң беренсе шиғырҙарын мәктәпкә бармаҫ борон уҡ яҙа. Бәләкәс кенә ҡыҙыҡайға был эш оҡшап ҡала: ябай ғына күренеште оҫта итеп рифмаға һалғанын, әлбиттә, был ваҡытта аңламай әле.

Байтаҡ шиғырҙары 1970 йылда Силәбе ҡалаһында нәшер ителгән “Солнце на ладони”, 1979 йылда Ҡазанда сыҡҡан “Яшълегем-Чаллы”, 1981 йылда Өфөлә баҫылған “Йәш көстәр”, 1984 йылда Ҡазанда “Кызлар жыры” һәм шулай уҡ “Һеҙҙең өсөн йәшәйем” (1987) йыйынтыҡтарында донъя күрҙе. Шағирә лирик



podpiska.pochta.ru

һәм лиро – эпик жанрҙарҙа ла бик уңышлы эшләй. Кеше һәм Бөйөк көс – тәбиғәттең үҙ-ара тиңһеҙ бәйләнешен, тик ептәрҙең әленән-әле нескәрә барыуын, һәр кем күңелендә заман йоғонтоһо тыуҙырған үҙгәрештәр тураһында уйланыуҙарын сағылдыра.

*Ер шарына ҡарай алһаң,*
*Маңлай түгел, күңел күҙе менән,*
*Тойор инең тауҙар, һыуҙар моңон*
*Ерҙең һөйләшкәндәй үҙе менән.*
*Күрер инең Ер тәненә күпме*
*Яра, йәрәхәттәр һалыныуын*
*Һәм Йыһандың төҫө үҙгәрешен*
*Һыҙланыуҙарынан Һылыуының.*

(“Икеләнеү”)

Ҡатын-ҡыҙ темаһы ла шағирә иғтибарынан ситтә ҡалмай. “Ҡатындар”, “Ике ҡатын һөйләшенән”, “Ҡатын-ҡыҙҙарға” шиғырҙарында гүзәл заттың беренсенән, иң баһалы сифаты – уңғанлыҡ, изгелеклек, сабырлыҡ, һөйөү көсө булһа, икенсенән, теле, эше абруйы менән кәрәк саҡта ил арбаһына егелеп һөйрәрҙәй көсө булырға тейешлеген дә әйтеп бирә. “Ерле-юҡҡа күңел ҡатып, бәләкәй ҡыуаныстарға ла рәхмәтле булмаһаҡ, тормоштоң йәме китер, хистәр һүрелер,” – ти ул.

Илдәге сыуалыштар, сәйәси буталыштар, ил ер яҙмышы, илдәге тотороҡһоҙлоҡтан халыҡтар араһындағы дуҫлыҡтың ҡаҡшауы, ғаилә ҡиммәттәренең юҡҡа сыға барыуы, яңғыҙ әсәйҙәрҙең күбәйеүе бик борсой шағирәне.

Ҡәһәрле Чечня һуғышы ҙур үкенестәре менән Рәсәй әсәләренең күңеленә ҡурғаш булып ятты. “Һаташыу”поэмаһындағы лирик геройҙың йөрәк әрнеүҙәре, кисерә алмаҫлыҡ ҡайғылары менән ауыр юғалтыуҙары үтә аяныслы. Ҡалаға килеп, уҡырға керә алмаған Гөлназ, ауылына кире ҡайтырға оялып, заводҡа эшкә керә. Токарь һөнәрен үҙләштереп, разрядын ғына түгел, абруйын да арттырып көн күргәндә шул уҡ цехҡа Вәғиз исемле егет эшкә килә. Йәштәр араһындағы мөхәббәттең аҙағы ғына Гөлназ көткәнсә булмай: өйләнергә һүҙ биргән егет юҡҡа сыға, ҡыҙ буйға уҙғанын һиҙә.

Улына ғүмер биреп, бер үҙе тәрбиәләп, ваҡыты еткәс күҙ ҡараһын әрмеләргә оҙата. Һуңғы хатында улы әсәһенә атаһын табыуын яҙа, үҙе атаһы ҡулында ауыр йәрәхәттән йән бирә.

*Дауыл ҡупты Вәғиз күңелендә,*
*Сытырлатып йомдо күҙҙәрен...*
*Әсәйемә... тапшырһағыҙ ине...*
*Түш кеҫәмдә...*
*Үҙ ҡулығыҙ... рәхмәт...*
*Мин... һеҙҙе...*
*Әйталманы башҡа һүҙҙәрен...*

Меңәрләгән ғәйепһеҙ ҡорбандар исемлегенә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Азаттың да исеме яҙыла.

*Рәсәй әсәләре тапҡан улдар*
*Ҡыйылалар яуҙа аяуһыҙ.*
*Ҡылдай зыңлап өҙөлә йәш ғүмерҙәр –*
*Әсә йөрәгендә ҡаяуы.*

“Мин ғәйепле түгел” поэмаһында шағирәнең халыҡ яҙмышы өсөн йән атыуы айырыуса асыҡ күренә. Илдәге торғонлоҡ йылдары халыҡтың өйрәнелгән йәшәү ҡанундарын үҙгәртә, күпселек өмөтһеҙлөккә бирелә, эшһеҙ ҡалған халыҡ ҡайҙа барып бәрелергә белмәй, киләсәккә ышанмау күптәрҙе хәмер юлына баҫтыра. Тыныс тормошта тырыш хеҙмәт итеп, иртәгәһе көнө, балалары, яҡындары өсөн ҡайғырмай йәшәп ятҡан Илнур менән Зәбирәнең ғаиләһе, завод янғас, эшһеҙ ҡала. Зәбирә уҡытыусы булып эшләп йөрөһә лә, әллә нисә ай эш хаҡы күргәне юҡ.

Заводҡа нигеҙ һалыусыларҙың береһе Иван Холмогоров, яңы хужа менән тәү ҡарамаҡҡа һәйбәт кенә эшләп алып



podpiska.pochta.ru

китһә лә, тора-бара эш хаҡының эшселәргә тулайым барып етмәүен үҙенсә хәл итә. Завод эшмәкәрлеге "бәйҙән ысҡынғанын" ул һуң ғына аңлай, үкенескә ҡаршы, үҙенә ҡул һалып ҡуя.

*Әммә нисә быуын тыныс эшләп,*
*Йәшәү рәүешенә күнеккәс,*
*Халыҡ һаман гел яҡшыны көттө:*
*Күҙ күрер, тип, ваҡыт, көн еткәс.*

Халыҡтың көтөүе бушҡа була, мәктәпте ташлап баҙарға әйбер һатырға урынлашҡан ҡатыны Зәбирә янына Илнур ҙа эшкә сыға. Ғөмүмән, "Мин ғәйепле түгел" тигән поэма бөтә Рәсәйҙең яңы тарихы нисек яҙылыуын бер ғаилә миҫалында күрһәтә.

Фирҙәүес Башированың мөхәббәт хистәре менән һуғарылған лирик шиғырҙар ижад итеүендә йәшләй табышып, ҡауышҡан тормош юлдашы Йәдкәр Бәшировтың өлөшө ҙурҙыр. Улар бик матур, татыу ғүмер кисерәләр.

*Әллә ниңә ҡыйыр-ҡыймаҫ ҡына,*
*Ҡараным да шул саҡ ҡыйылып,*
*Муйыл күҙҙәр – күңел күҙҙәреңдең*
*Ялҡынынан төштөм ҡойолоп.*

("Эҙләнмәгән, көтөлмәгән ҡараш")

Йәдкәр Баширов – Башҡортостандың тарихсыһы, атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, социология фәндәре кандидаты, рәссам, тарих буйынса бихисап китаптар авторы. Бәшировтар Башҡортостанда ла, Татарстанда ла иҫ китерлек ҙур эштәр башҡарҙылар, уларҙың исеме меңдәрсә уҡыусылары йөрәгендә урын алған. Фирҙәүес Бәшированың "Уйланыу" шиғырындағы юлдар, әйтерһең тап икәүһе тураһында.

*Бөйөклөктөң ябайлыҡта икәнлеген*
*Үҙ-үҙенә бик һирәктәр асҡан...*

Фирҙәүес Бәширова хеҙмәт юлын Силәбе өлкәһендә физика уҡытыусыһы булып башлай, Бәләбәй машиналар эшләү техникумында уҡыта. 1977 йылда Яр Саллыла Кама автомобилдәр заводында эшләй һәм Татарстандың Автозавод районында район советына экономист итеп эшкә күсерелә. 1991 йылдан алып Татарстандың Президент аппаратында милләт-ара мөнәсәбәт бүлегендә баш референт булып эшләй. Ҡайҙа ғына эшләһә лә, ул уй-ниәттәрен, борсоған проблемаларын шиғыр юлдарына һала. Ижады менән ул тыуған илебеҙҙе, торған еребеҙҙе яратырға, тәбиғәтте һаҡларға, дуҫ-татыу йәшәргә, ауырлыҡтарҙы бергәләп еңергә, дөрөҫлөктө яҡларға, хеҙмәт һөйөргә, тырыш булырға саҡыра.

Ҙур тормош тәжрибәһе туплаған, үҫеп килгән быуынға патриотик тәрбиә биреүгә тос өлөш индергән Фирҙәүес Баширова Татарстанда милли мәсьәләләргә ҡараған барлыҡ сараларҙың үҙәгендә булды. Яр Саллыла башҡорт мәктәбе асылыу, Түбәнге Камала һәм башҡа ҡалаларҙа милли үҙәктәр булдырылыу – уның тырышлығы һөҙөмтәһе. Үҙ милләте өсөн һүрелмәҫ ғорурлыҡ тойғоһо шағирәнең күңелендә тәрән оялаған. Оҙаҡ йылдар Ҡазанда йәшәгән, Президент аппаратында милләт-ара мөнәсәбәттәр бүлегендә эшләгән шағирә: "Ғүмер буйы туғандаш ике республиканың ихтирамын тойоп йәшәнем" – ти.

Фирҙәүес Бәширова Ватанына һәм халҡына фиҙаҡәр хеҙмәте һәм халыҡтар араһында дуҫлыҡ һәм хеҙмәттәшлекте нығытыуға ҙур өлөш индергәне өсөн "Халыҡтар дуҫлығы" ордены, Татарстан Республикаһы Мәҙәниәт министрлығының Почет билдәһе менән наградланған. Ул – "Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре".

Ишембайҙа яҡташтары ижад кисәләрен, мәктәп уҡыусылары араһында шиғырҙар бәйгеһен үткәрә. Шағирә әле лә тынғы белмәй эшләй, ижади хеҙмәттәшлеген дауам итә.



podpiska.pochta.ru